**Республика тикшереү эшенең демонстрациялау варианты**

**ВАРИАНТ №1 – баш.**

**1-се өлөш**

| Тексты уҡығыҙ һәм 1–3-сө эш төрҙәрен башҡарығыҙ. |
|---|

Тәбиғәтте һаҡлағыҙ!

(1) Йәш замандаштарым! (2) Һеҙ Ватаныбыҙҙың таңы, өмөтө, киләсәге. (3) Беҙ, ветерандар, Ватаныбыҙ яҙмышын ышанып һеҙгә тапшырабыҙ. (4) Һеҙгә, атайҙарығыҙҙың хәрби һәм хеҙмәт данын дауам итеүселәргә, ныҡлы ышанабыҙ. (5) Был изге ышанысҡа лайыҡ булһағыҙ ине! (6) Еребеҙҙең күркен һаҡлаһағыҙ, уның йәмен тағы ла арттырһағыҙ ине! (7) Унда һәр ваҡыт тук башаҡтар тулҡынланһын, урмандар шаулаһын, саф һыулы йылғалар аҡһын!

(8) Тәбиғәтте һаҡлағыҙ! (9) Һеҙҙән һуң киләсәк быуын да тәбиғәт ҡосағында иртәнге саф һауаны кинәнеп һулай алһын. (10) Йәштәргә һәр саҡ һандуғас моңо юлдаш булһын, һәр яҙ игенсегә һабантурғайҙар дан йырлаһын.

1

Текста булған ике мөһим һөйләмде билдәләгеҙ. Ул һөйләмдәрҙең номерҙарын яҙығыҙ.

(3) Беҙ, ветерандар, Ватаныбыҙ яҙмышын ышанып һеҙгә тапшырабыҙ.

(6) Еребеҙҙең күркен һаҡлаһағыҙ, уның йөмен тағы ла арттырһағыҙ ине!

(7) Унда һәр ваҡыт түк башаҡтар тулҡынланһын, урмандар шаулаһын, саф һыулы йылғалар аҡһын!

(9) Һеҙҙән һуң киләсәк быуын да тәбиғәт ҡосағында иртәнге саф һауаны кинәнеп һулай алһын.

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

2

1–4-се һөйләмдәр араһынан исем ҡылым булған һөйләмде табып, номерын яҙығыҙ.

Яуап:

| |
|---|
| |

3

Текстан синонимдарҙы табып яҙығыҙ.

Яуап:

_______________________________

4

Ҡайһы фразеологик берәмек өндәшмәү мәғәнәһен бирә?

1) ауыҙға йоҙаҡ йоҙаҡ? 

2) ауыҙ бешеү;

3) ауыҙҙан ут сәсеү;

4) ауыҙын ябыу.

Яуап:

☐

5

Һуҙынҡы өндән башланмаған рәтте күрһәтегеҙ:

1) урам;

2) өйрәк;

3) ағас;

4) еләк.

Яуап:

☐

6

Ялғау дөрөҫ ҡушылмаған һүҙҙе билдәләгеҙ:

1) Бреска;

2) Пермгә;

3) Донбасска;

4) Кронштадтҡа.

Яуап:

☐

7

Ҡайһы рәттә яһалма һүҙҙәр бирелгән?

1) ауыл, юл, таш;

2) ауылға, юлдың, ташҡа;

3) ауылдаш, юлсы, ташлыҡ;

4) ауылдар, юлдаш, ташсы.

Яуап:

☐

8

Һинең ҡыҙың да бик матур. Алмаштың төркөмсәһен билдәләгеҙ:

1) зат алмашы;

2) билдәләү алмашы;

3) эйәлек алмашы;

4) һорау алмашы.

Яуап:

☐

9

Тиклем, табан, өсөн, арҡаһында.

Ярҙамсы һүҙ төркөмөн билдәләгеҙ:

1) киҫәксә;

2) ымлыҡ;

3) теркәүес;

4) бәйләүес.

Яуап:

10

Һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы.

Тәүге һүҙ һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килә?

1) тултырыусы;
2) аныҡлаусы;
3) хәл;
4) эйә.

Яуап:

11

Эйәрсән һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ:

| № | Һөйләмдәр | Хәреф | Эйәрсән һөйләм төрҙәре |
|---|---|---|---|
| 1. | Ҡайҙа ҡыйыу кеше кәрәк, ул шунда була. | А | Кире һөйләм |
| 2. | Көн эҫе булһа ла, күлдең һыуы йылынып бөтмәгәйне әле. | Б | Аныҡлаусы һөйләм |
| 3. | Ғайса көрөш башланасаҡ майҙан тирәһендә уралды. (Н.Мусин) | В | Урын һөйләм |

Таблицаға тап килгән һөйләмдәрҙең һандарын хәрефтәр аҫтына яҙығыҙ.

Яуап:

| А | Б | В |
|---|---|---|
| | | |

12

Эйәрсән хәбәр һөйләмдәрҙең ниндәй һорауға яуап булыуын билдәләгеҙ:

1) кем? нимә?
2) нимә? нимәлә? кемдеке?
3) кемдең? ниндәй? ҡайһы?
4) кемде? нимәне? кемгә?

Яуап:

| |
|---|
| |

13

1-се бағаналағы грамматик хаталарға тап килгән һөйләмдәрҙе билдәләгеҙ. 1-се бағаналағы һәр позицияға икенсе бағаналағы позицияны күрһәтегеҙ.

**Грамматик хаталар** **Һөйләмдәр**

| | | | |
|---|---|---|---|
| А | һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе боҙолған | 1 | Мин быйыл колхозда ла үҙебеҙҙең училище баҡсаһында ла эшләнем. |
| Б | тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә хата | 2 | Барыһыла тынып ҡалды. |
| В | киҫәксәләр яҙылышында | 3 | Борон-борон заманда,

| | | | |
|---|---|---|---|
| | хата | | Урал тауы ла, Ағиҙел дә әле юҡ саҡта, шыр урман эсендә йәшәгән, ти, бер бабай менән әбей. |

Таблицаға тап килгән һөйләмдәрҙең һандарын хәрефтәр аҫтына яҙығыҙ.

Яуап:

| А | Б | В |
|---|---|---|
| | | |

| 14 |
|---|

Ҡайһы яуап һөйләмдә һыҙыҡ ҡуйылырға тейеш урында күрһәтә?

Мансур бабай бәләкәс балаларҙы ғына түгел (1) ҡолондарҙы (2) бәрәстәрҙе (3) эттәрҙе (4) бөтә хайуандарҙы ла бик ярата шул.

Яуап:

| |
|---|
| |